5-се класс. Дата _________
Тема: Фонетика
Маҡсаттар:

1.Түбән кластарҙа фонетика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау, иҫкә төшөрөү.
2.Уҡыусыларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереү-тамамланмаған әкиәттең аҙағын һөйләү.
3.Күнегеүҙәрҙең текстарына таянып туған тәбиғәткә, ҡоштарға , йәнлектәргә һөйөү тойғоһон тәрбиәләү.
Йыһазландырыу: « Фонетика» таблицаһы, « Алфавит», Әкиәттәргә иллюстрация.
Дәрес барышы:

I. 1.Ойоштороу мәле.

“Алфавит алымы” менән һөйләмдәр, һүҙбәйләнештәр төҙөү.

Аҡыллы бала ваҡытһыҙ геүелдәй. Ғәлиәнең дәфтәрендә ҙур еләктәр, жирафлы зонт....

2. Дәрестең темаһын һәм маҡсатын асыҡлау.
3. Өйгә эште тикшереү. Үтелгәндәрҙе нығытыу.
II. Тема өҫтөндә эш.
1. Матур яҙыу минуты: Алфавит тәртибендә кешеләгә сифаттар исемлеге.

Аҡыллы, башлы, вайымһыҙ, гүзәл, ғәҙел, дөрөҫ, ҙур, егәрле...
2. « Фонетика» таблицаһы ярҙамында үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү.
Кеше һөйләгәндә өндәр сығара. Өн телмәрҙең иң ҡыҫҡа һәм бәләкәй берәмеге.
Телмәр өндәрен, уларҙың төрлө шарттарҙа нисек үҙгәреүен өйрәнеүсе фәнде – фонетика, ә өндәрҙең яҙыуҙа бирелешен өйрәнә торған фәнде – графика тиҙәр

а) Хәреф һәм өн; ижек: асыҡ ижектәр, ябыҡ ижектәр.
б) Ҡалын һуҙынҡылар: а, о, у. ы. Нәҙек һуҙынҡылар: ә, ө, ү, и, э
в) Парлы тартынҡылар: б-п, в-ф, г-к, ғ-ҡ, ж-ш, з-с, ҙ-ҫ, д-т.
Парһыҙ тартынҡыла: й, р, л, м, н, ң – талғын, ц, ч, щ, х, һ - һаңғырау
г) Өндө белдермәгән хәрефтәр: ь, ъ;

Ике өн белдергән хәрефтәр: я, ё, е, ю
Ял минуты : Алфавит уйыны :
А 1.Үҫмерҙәр өсөн баҫтырылған журнал?(Аманат)

2. Үҙеңдән оло ир кеше? (ағай)

3. Пассажирҙарҙы ваҡытында алып йөрөүсе машина (автобус)

4. Мал торған урын (аҙбар)

5.Кисен яҡтылыҡ өләшкән күк есеме.(ай)

6.Ете көн ( аҙна). 7.Төҫ(аҡ)

8.Музыка ҡоралы(аккордион).

9.Хәрефтәр тәртибе (Алфавит)

10.Ҡош (аҡҡош)
3. Һүҙҙе фонетик тикшереү өлгөһөн иҫкә төшөрөү
Тикшереү тәртибе.
1. Һүҙҙе нисек ишетелә шулай, ижеккә бүлеп, яҙып алыу.
2. Һүҙҙә нисә өн, нисә хәреф бар?
3. Һуҙынҡы өндәрҙең ҡалын/нәҙеклеген, ә тартынҡыларҙың яңғырау/һаңғыраулығын, йомшаҡ/ҡатылығын билдә¬ләү.
Өлгө. Ебәк — [йэ — вәк]; 2 ижек, 4 х., 5 өн ,Һүҙҙең яҙылышы әйтелешенә тап килмәй.
е — [й] — тартынҡы, талғын, яңғырау
[э] — һуҙынҡы, нәҙек, баҫымһыҙ
б — [в] — тартынҡы, парлы, яңғырау
э — [ә] — һуҙынҡы, нәҙек. баҫымлы
к — [к] — тартынҡы, парлы, һаңғырау.
4. Нығытыу өсөн:

Таҡтала һүҙҙәргә фонетик анализ: көҙ, урман, донъя, ямғыр.
5. 8-се күнегеү буйынса һүҙлек диктант: һүҙҙәрҙе төбәү килештә яҙырға.
6. Т.ү. 9-сы күнегеүҙе телдән: «Етем төлкө» әкиәтенең дауамын кем эҙмә - эҙлекле итеп һөйләр? Төп фекерҙе билдәләүсе мәҡәлде табыу.
III . Дәресте йомғаҡлау. Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген баһалау.
Өйгә эш:

1. Алфавитт ятларға;

2. Дарья, ете, ҡыҙҙар һүҙҙәренә фонетик анализ эшләргә;

3. Кластағы уҡыусыларҙың исемдәрен алфавит тәртибендә яҙырға